*Приложение №2*
*к рабочей программе по родному языку (башкирский), утв.пр. № 116 от 29.08.2022 г.*

Муниципальное бюджетное общеобразовательное учреждение
средняя общеобразовательная школа
имени Талгата Лутфулловича Рахманова с.Верхнеяркеево
муниципального района Илишевский район Республики Башкортостан

УТВЕРЖДАЮ
Директор МБОУ СОШ
им.Т.Рахманова с.Верхнеяркееево

_______________ Шафикова Г.И.
№ пр.116 от «29» августа 2022 г.

**Контрольно-измерительные материалы промежуточной**
**аттестации и критерии оценивания**

по родному языку(башкирский)

| | |
|---|---|
| Уровень общего образования | начальное |
| Класс | 2 |
| Учитель | Магданова Д.М. |

2022 г.

**Уҡыусыларҙың белемдәрен һәм күнекмәләрен баһалау нормалары**

**Диктанттарҙы баһалау критерийҙары**

**Контроль диктантты тикшергәндә, түбәндәге хаталар төҙәтелә, ләкин баһалағанда иҫәпкә алынмай:**

1) мәктәп программаһына индерелмәгән ҡағиҙәгә яҙылыштар;

2) әле үтелмәгән ҡағиҙәгә яһалған хаталар;

3) автор ҡуйған ҡатмарлы пунктуацияға хаталар;

4) механик рәүештә бер хәреф урынына икенсеһен яҙыу (мәҫәлән: *ата* урынына *аша).*

Диктантҡа билдә ҡуйғанда шулай уҡ хаталарҙың характерына иғтибар итергә кәрәк. Хаталарҙы иҫәпләгәндә тупаҫ булмағандары, йәғни грамоталылыҡты билдәләү өсөн әһәмиәте юҡтары, айырым билдәләнә. Бындай хаталарҙың икеһе берәүгә иҫәпләнә.

**Түбәндәге хаталар тупаҫ булмаған хаталарға инә:**

1) ҡағиҙәләрҙең иҫкәрмәләренә ҡараған хаталар;

2) бәйләү юлы менән яһалған ҡушма яңғыҙлыҡ атамаларҙа ҙур хәрефтең яҙылышына хаталар;

3) бер тыныш билдәһе урынына икенсеһен ҡуйыу;

4) үҙләштерелгән һүҙҙәрҙең ялғауҙары яҙылышына хаталар.

**Диктант бер генә билдә менән баһалана.**

**«5» билдәһе**- тупаҫ булмаған 1 орфографик йә1 пунктуацион хата булған эшкә.

**«4» билдәһе** - 1-2 орфографик, 3 пунктуацион йә 1 орфографик хата булған эшкә.

**«3» билдәһе** - 3-4 орфографик, 4 пунктуацион йә 3 орфографик. Әгәр эштә өс бер типтағы хата ебәрелһә ҡуйырға мөмкин.

**«2» билдәһе -** 5-8 орфографик, 6 пунктуацион йә 5 орфографик хатаһы булған диктантҡа ҡуйыла.

**«1» билдәһе - (**уҡытыусы ҡарамағында) хаталар һаны 8 орфографик хатанан да артып китһә ҡуйыла.

## Контроль- үлсәү материалдары

***Контроль күсереп яҙыу***

**Ағас ултыртыу.**

Марат менән Гөлшат тәүге бураҙнаға төштө. Марат соҡор ҡаҙыны. Гөлшат ҡарағай үҫентеләре ултырта барҙы. Улар артынан башҡалар ҙа ҡуҙғалды. Фәриҙә менән Хәмзә бергә эшләне. Рауил үҫентеләр ташып торҙо. (28 һүҙ)

Функциональ грамоталылыҡты үҫтереү буйынса эш төрө (развитие функциональной грамотности):
1.Кем? һорауына яуап биргән һүҙҙәрҙең аҫтына һыҙырға
2.Тағы ниндәй ағас исемдәрен беләһең?

***Контроль диктант***

**Ҡарағай башында**

Оянан тейендең башы күренде. Ул ҡолаҡтарын ҡайсыланы. Бер аҙ тыңлап торҙо. Унан етеҙ генә ояһынан сыҡты. Кейек иң бейек ҡарағайға күсте. Бынан бөтә урман өҫтө яҡшы күренә. Тейен тирә-яҡты күҙәтә. (31 һүҙ)

Функциональ грамоталылыҡты үҫтереү буйынса эш төрө (развитие функциональной грамотности):
1.Ни эшләй? һорауына яуап биргән һүҙҙәрҙе яҙырға.
2.Тағы ла ниндәй кейектәрҙең исемдәрен беләһегеҙ?

***Контроль күсереп яҙыу***

**Ат.**

Ат – борондан башҡорт халҡының тоғро юлдашы булған. Башҡорт үҙенең аты менән утты ла, һыуҙы ла кискән. Ҡурҡаҡ иптәшкә ҡарағанда ул хужаһына тоғро булып ҡалған. Кеше атына һағышын һөйләгән, серен сискән. *(30 һүҙ)*

Функциональ грамоталылыҡты үҫтереү буйынса эш төрө (развитие функциональной грамотности):
1.Йорт хайуандарының исемдәрен яҙырға.
2.Борондан һүҙен ижектәргә бүлеп яҙырға.

**Контроль диктант**

**Ололар һүҙе.**

Яҡшылыҡ ерҙә ятмай. Ҡалған эшкә ҡар яуа. Батырлыҡ яуҙа беленә. Юртаҡ атҡа юл ҡыҫҡа. Хеҙмәте юҡтың хөрмәте юҡ. Уҡығандың теле икәү. Ни сәсһәң, шуны урырһың. Үҙеңде ҙурлама, кешене хурлама. Белеме барҙың ҡәҙере бар.*(33 һүҙ)*

Функциональ грамоталылыҡты үҫтереү буйынса эш төрө (развитие функциональной грамотности):
1.Уҡығандың һүҙен ижектәргә бүлеп яҙырға.
2.Бер мәҡәлдең мәғәнәһен аңлатып ҡарарға

**Өйрәтеү изложениһы**

**Терпе ҡыҙына күстәнәс.**

Терпе аҡ ҡына бәшмәккә тап булды. Бәшмәктән тәмле еҫ бөркөлә! Эй һөйөндө терпе. Ул бәшмәкте ҡыҙына күстәнәс итеп алып ҡайтырға булды. Бәшмәкте мороно менән төртөп осорҙо. Энәле арҡаһына сәнсеп алды. Тып-тып атлап, өңөнә йүнәлде.
Функциональ грамоталылыҡты үҫтереү буйынса эш төрө (развитие функциональной грамотности): 1.Ишеткәндәрҙе хәтерҙә ҡалдырып яҙырға.2.Йөкмәткене һөйләй белергә

**Өйрәтеү иншаһы**

**Беҙҙең класс**

Беҙҙең класта бөтәһе__________ уҡыусы. ______ҡыҙ__________малай. Класс етәксеһе______ _____________ ______________. Яратҡан дәрестәрем___________ ,_________,____________.

Функциональ грамоталылыҡты үҫтереү буйынса эш төрө (развитие функциональной грамотности):1.Буш урындарға тейешле һүҙҙәрҙе яҙырға. 2.Телдән һөйләп ҡарарға